# КҮК ИРӘНДЕК ЙЫРСЫҺЫ



Башҡортостандың халыҡ шағиры,
Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты
Абдулхаҡ Игебаевтың тыуыуына – 90 йыл



- *Башҡортостандың халыҡ шағиры*
- *1963 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы*
- *Башҡорт АССР-ының һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре*
- *Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты*
- *Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы лауреаты*
- *Салауат Юлаев ордены кавалеры*



Абдулхаҡ Хажмөхәмәт улы Игебаев 1930 йылдың 2 июлендә Башҡорт АССР-ының Баймаҡ районы Күсей ауылында тыуған. Йәшләй етем ҡала, балалар йортонда тәрбиәләнә.

1946—1950 йылдарҙа К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының (1957 йылдан Башҡорт дәүләт университеты) тел һәм әҙәбиәт факультетында уҡый. Институтты тамамлағас, «Ҡыҙыл таң», «Совет Башҡортостаны» гәзиттәре һәм «Ағиҙел» журналы редакцияларында әҙәби хеҙмәткәр булып эшләй.

Абдулхаҡ Игебаевтың шиғырҙары республика матбуғатында 1948—1949 йылдарҙа уҡ күренә башлай. Ә беренсе китабы - «Йәшлек йыры» тигән шиғырҙар йыйынтығы 1954 йылда баҫылып сыға. Шунан бирле авторҙың Өфө, Ҡазан һәм Мәскәү нәшриәттәрендә башҡорт, татар, рус телдәрендә утыҙҙан артыҡ китабы донъя күрҙе.

**1954** йылдан алып уның шиғыр һәм поэмаларҙан, йыр һәм очерктарҙан торған 34 китабы донъя күрә.

1969—1971 йылдарҙа Мәскәүҙә М.Горький исемендәге Әҙәбиәт институты ҡарамағындағы Юғары әҙәби курсты тамамлап ҡайта. 1971 йылдан 1990 йылға ҡәҙәр «Ағиҙел» журналы редакцияһының поэзия бүлеге мөхәррире вазифаһын башҡара.

Абдулхаҡ Игебаев оҙаҡ һәм ҡаты ауырығандан һуң 2016 йылдың 27 сентябрендә Өфөлә вафат булды.

Ерҙең алыҫ тарафтарын
Ҡыҙырҙым мин иңләп – буйлап,
Мәгәр, ҡайҙа юлыҡһам да,
Урал ҡурайының моңо
Ҡолағымда торҙо сыңлап.

Сит тупраҡты ерһенмәнем,
Сарсап  ҡайттым төйәгемә…
Төйәгемә һөйөүемде
Ҡая таштарына түгел,
Яҙҙым халҡым йөрәгенә!











*Һайланма әҫәрҙәр : 2 т. Т. 1 :*
*Шиғырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар.*
*– Өфө : Китап, 2004. – 400 б.*

*Һайланма әҫәрҙәр : 2 т. Т. 2 :*
*Шиғырҙар, әкиәттәр, поэмалар.*
*– Өфө : Китап, 2005. – 400 б.*




# Ғүмер юлы



**Яҙмыш бирәүгә лә тыуғансы уҡ
һалып ҡуймай юлдың түтәһен...
Сәңгелдәктән һуңғы һулышҡаса
Үҙ юлыңды үҙең үтәһең!..
Ни күтә һуң мине юлдарымда —
Юғалтыуҙы,
әллә табышмы?
Мөлдөрәмә тулы ҡыуанысмы,
Йәнде ҡурып алыр һағышмы?**

**Тормошомда ниҙәр кисерһәм дә,
Керләмәмен йөрәк хисемде.
Һәр ваҡытта ғорур аҡлармын мин
Кеше тигән бөйөк исемде!**

*Һайланма әҫәрҙәр : Шиғырҙар, йырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар : 1 томда. – Өфө: Китап, 1994. – 304 б.*




Елеп бара ғүмер йомғағы : шиғырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар. – Өфө : Китап, 2000.
– 464 б



# *Елеп бара ғүмер йомғағы*



*Күргән-кисергәндәр эҙһеҙ ҡалмай,*
*Маңлайҙарға ята юлағы;*
*Хәтирәләр ебен сорнай-сорнай*
*Елеп бара ғүмер йомғағы.*
*Бәғзе ваҡыт, һис тә көтмәгәндә,*
*Сын тормошҡа аша уйҙағы;*
*Оло маҡсаттарға ашҡындырып,*
*Елеп бара ғүмер йомғағы.*
*Юлдарына тотҡар ҡоролһа ла,*
*Ябырылһа ла аһ-зар ҡамғағы;*
*Хоҙайтәғәлә биргән ҡөҙрәт менән*
*Елеп бара ғүмер йомғағы.*
*Асмандарҙа көмөш Ай ҡалҡамы,*
*Ҡыҙарамы таңдар шаңдағы;*
*Донъя тигән сикһеҙ арауыҡта*
*Тыуған ерҙең тартыу көсөн тойоп,*
*Елеп бара ғүмер йомғағы*

# Тыуған  яҡ- илһам сығанағы

Һәр  ҡоштоң үҙ ояһы, һәр балыҡтың үҙ  күле, һәр  әҙәмдең  үҙ иле, йәғни кендеге  береккән,  йәне ереккән  мәрхәмәтле ғәзиз төйәге, тыуған  ере  була.

Беҙҙең  өсөн  нурлы - йырлы төйәгебеҙ, тыуған  яғыбыҙ - Баймағыбыҙ  бер  генә! Күҙ  алмаһы  кеүек  бер  енә!  Күкрәктәге  дөпөлдәп  типкән  йөрәк кеүек бер генә!  Әйе,

Баймаҡ  үҙ  тәбиғәте  менән  мөғжизәле  ил!
Баймаҡ  үҙ  хазинаһы  менән  зиннәтле  ил!
Баймаҡ  - үҙ  икмәге  менән  икмәкле  ил!
Баймаҡ - үҙ  талантттары  менән  хикмәтле  ил!

Баймаҡ  тарихи  ваҡиғаларға  бай  яҡ. Ҡолаҡ  һалып  тыңлаһаң, уның  һәр ағасы, һәр  йылғаһы,  һәр  убаһы, һәр  ҡаяһы  әллә  күпме  хикәйәт,  әллә күпме  шәжәрә,  әллә  күпме  легенда  һөйләр  кеүек тойола.

*Абдулхаҡ  Игебаев*




Йәшлек йыры : шиғырҙар. – Өфө : Башҡ. кит. изд, 1954. – 83 б.



*Һөйөүем һиңә, илем, гөлдәр төҫлө,*
*Уралып-уралып үҫкән күңелгә,*
*Хаттта тупрағыңдың бөртөгөн дә*
*Алыштырмаҫ инем бер нигә.*




Яңы һыҙаттар : очерктәр. – Өфө : Башҡ. кит. изд, 1957. – 82 б.



*А. Игебевтың был китабында ауыл тормошо һүрәтләнгән, уның хеҙмәт һөйгән тырыш кешеләре тураһында очерктар йыйылған.*






*Ирәндек бөркөтө : шиғырҙар. – Өфө : Башҡ. кит. изд–твоhы, 1959. – 158 б.*




Урал тауышы : Шиғырҙар, поэмалар. – Өфө : Башҡ. китап нәшр., 1969. – 127 б.



*Ваҡыт толпарында елеп – сабып,*
*Уҙып китһәләр ҙә йылдарым,*
*Килер заманда ла күкрәр өсөн*
*Уралымда ҡалыр моңдарым!*











*Алтын тулҡындар : шиғырҙар. – Өфө : Башҡ. кит. нәшр., 1966. – 128 б.*

*Беләм ерем–һыуым ҡәҙерен. – Өфө : Башҡ. кит. нәшр., 1976. – 159 б.*








Һағына белә икән таштар ҙа : лирика. – Өфө : Башҡ. кит. нәшр., 1972. – 159 б.








*Ҡайҙа һайрай һандуғасҡай : шиғырҙар : кесе йәштәге мәктәп балалары өсөн. – Өфө : Башҡ. кит. нәшр., 1974. – 80 б.*




Гөлдәр һиберҙәй булам : шиғырҙар.
– Өфө : Башҡ. кит. нәшр., 1984. – 127 б.





***Селтер-селтер шишмәмдән***
***Сыңғырап торған йыр алдым,***
***Ҡояшымдан, айымдан***
***Мин мәңгелек нур алдым.***




*Шиғырҙар, поэмалар. – Өфө : Башҡ. кит. нәшр., 1980. – 255 б.*



*Авторҙың 1980 йылда сыҡҡан был йыйынтығына тыуған ил тураһында шиғырҙары ингән. Һәм шулай уҡ "Урал тауышы”, “Оран һала Ер-әсә” исемле патетик поэмалары урын алған.*








Абдулхаҡ Игебаевтың бөтә ижадында, бигерәк тә әлеге поэтик китабында, ул туған тәбиғәт йәмен таусирлаймы, мәғрүр Урал, йәмле Ағиҙел хаҡында йырлаймы, башҡорт халҡынынң героик үткәнен, бөгөнгө тормошон данлаймы, ил-йорт ырыҫын, халыҡтар дуҫлығын ололаймы – улар барыһы ла тыуған республикаһының мөһәбәт образын тыуҙырыуға, әсәһендәй күреп, үҙенең уллыҡ хисен, уллыҡ мөхәббәтен еткереүгә йүнәлдерелә.

*Әйтелмәгән һүҙҙәр : шиғырҙар, поэмалар. – Өфө : Башҡ. кит. нәшр., 1990. – 304 б.*








Яшьлек илендә калам : Шигырьләр, поэмалар, кобайырлар. – Казан : Тат. кит. нәшр., 1997. – 384 б.

*Абдулхаҡ Игебаевтың күп шиғырҙары рус, татар, украин, ҡырғыҙ, үзбәк, яҡут һәм башҡа телдәргә тәржемә ителгән. Шуларҙың береһе “Яшьлек илендә калам” исемле йыйынтығы. Татар халҡы тарафынан йылы ҡабул ителгән был йыйынтыҡта шиғырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар татар теленә тәржемә ителгән.*






Яҙмыш юлҡайҙары урау–урау… :
Әҙәби портреттар, хәтирәләр,
бағышлауҙар.
– Өфө : Китап, 2002. – 256 б.





Йыйынтыҡ өс бүлектән тора. Мәшһүр әҙиптәр, атаҡлы композиторҙар, танылған йырсылар, арҙаҡлы шәхестәр тураһында яҙмалар тупланған.




Ҡайҙа һайрай һандуғаскай? : шиғырҙар, йырҙар, ҡобайырҙар, әкиәттәр, поэмалар. – Өфө : Китап, 2010. – 480 б.



*Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты арҙаҡлы шағир Абдулхаҡ Игебаевтың был йыйынтығына кескәйҙәр, үҫмерҙәр һәм өлкән йәштәге уҡыусылар өсөн яҙған шиғырҙары, йырҙары, ҡобайырҙары, әкиәттәре, поэмалары тупланды.*

*Йыйынтыҡҡа тупланған әҫәрҙәр Башҡортостанға, Ер-һыуыбыҙға ҡайнар һөйөү тойғолары менән һуғарылған.*




Ғүмер юлы: шиғырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар. – Өфө : Китап, 2015. – 469 б.





*«Минең ижадымды ихтирам итеүсе уҡыусыларым өсөн оҙайлы йылдар буйына ижад иткән күләмле йыйынтығымды әҙерләнем. Китабымдың исеме*

*«Ғүмер аяулы»*

*тип атала.*

*Йыйынтыҡтағы шиғырҙарым унар йыл ваҡыт арауығын үҙ эсенә ала.*

*Минең ижадым менән ҡыҙыҡһынған ғалимдар, әҙәбиәтселәр, уҡыусылар ижад юлымды, ижади үҫешемде, ижади эҙләнеүҙәремде өйрәнер, сағыштырыр өсөн ҡулайлы булыр тигән маҡсаттан сығып эшләнем мин.»*

*Абдулхаҡ Игебаев*




Земля – моя колыбель : стихи и поэма. – Уфа : Башк. кн. изд–во, 1970. – 111 с.




Игебаев, А. Х. Шагаю по белой тропинке : стихи, сказки, поэмы : пер. с башк. / А. Игебаев. – Уфа : Китап, 2012. – 252 с.







*Күп йылдар дауамында Абдулхаҡ Игебаев балалар әҙәбиәте өлкәһендә лә ең һыҙғанып эшләй. Уның кесе*
*Йәштәге балалар өсөн, мәктәп уҡыусылары өсөн яҙған йыйынтыҡтары бәләкәс дуҫтарыбыҙға яҡшы таныш.*









*Минең һеңлем : Шиғырҙар. – Өфө : Башҡ. кит. изд–твоһы, 1958. – 52 б.*

*Аҡбуҙат : шиғырҙар : мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн. – Өфө : Башҡ. кит.изд–твоһы, 1960. – 64 б.*








*Авторҙың “Һеҙҙең өсөн, балалар!” йыйынтығы кесе йәштәгеләргә тәғәйен шиғриәтенең тема, жанр, шиғри биҙәктәр байлығын да асыҡ күрһәтеп тора. Унда тәбиғәт донъяһына, йәмғиәт тормошона арналған лирик һәм сюжетлы шиғырҙары ла, юмор һәм сатира өлгөләрен дә, шиғри әкиәттәрҙе лә кинәнеп уҡырға мөмкин.*

*Йөкмәткеһенә бәрәбәр китаптың матур биҙәлеше, һүрәттәре һоҡландыра.*

*Һеҙҙең өсөн, балалар ! : Шиғырҙар, әкиәт. – Өфө : Башҡ. кит. нәшр., 1989. – 136 б.*











*Бәләкәс дуҫтарыма : шиғырҙар. – Өфө : Башҡ. китап нәшр., 1979. – 160 б.*

*Сәй ҡайнатты ҡуяндар : шиғырҙар, йырҙар, әкиәттәр, сценарий. – Өфө : Китап, 1997. – 200 б.*











Серебряный колокольчик : стихи. – М. : Детская лит., 1970. – 32 с.

Пляшет зайчик золотой : стихи и сказки : пер. с башк. – Уфа : Башк. кн. изд–во, 1977. – 95 с.






*Отчего березка плачет? : Стихи, сказки. – Уфа, 1982. – 120 с.*



*Балалар өсөн рус телендәге китаптары ҙур тираждар менән таратыла. Был китапта шиғырҙар, әкиәттәр урын алған. Тыуған илгә, ғәзиз ергә һөйөү тойғолары сағыла, бала саҡ моңдары яңғырап тора.*





*Абдулхаҡ Игебаев бик тә үҙенсәлекле, тәрән хисле лирик шағир ине.*

*Туған телем тип, туған милләтем тип йән атып, ялҡынланып йәшәгән сая рухлы шағирҙарҙың береһе ине. Ана шуға күрә лә уның әҫәрҙәре Башҡортостанға һәм Уралға, милләткә һәм мөхәббәткә ҡайнар һөйөү тойғолары менән һуғарылған.*



Абдулхаҡ Игебаев ҡатыны Мәһиҙә менән
Ирәндек итәгендә



Шағир яҡташтары менән тыуған ауылында



Абдулхаҡ Игебаев Яныбай Хамматов менән



Ил уҙаманы Зекериә Шәрәфетдин улы Аҡназаров
шағир Абдулхаҡ Игебаев менән



Атайсалда осрашыуҙар:
Рәшит Дәүләтшин, Мәһиҙә Игебаева, Абдулхаҡ Игебаев, Әнүәр Әсфәндиәров, Илшат Ситдиков, Салауат Галин, Зөфәр Еникеев, Әхнәф Дилмөхәмәтов.
Ноябрь, 2000 й.



Абдулхаҡ Игебаев ҡатыны Маһизә, ҡызы Фәниә менән данлы Темәстең гүзәл тәбиғәт ҡосағында.
2000 йыл



Өфө ҡалаһына 425 йыл тулған көндәрҙә төшкән фото.
Шағир яҡташтары араһында.
1999 йыл

# ЯҠТАШТАРЫ ШАҒИР ИЖАДЫ ХАҠЫНДА

Фекергә лә, телгә лә, хис - тойғоға ла бик бай ул Игебай. Тормошто яҡшы белгән, уның әсе-сөсөһөн мул татыған әҙиптең шиғырҙарын иғтибарлап уҡыһаң, һәр юлында һәр ҡайһыбыҙға төбәп әйтелгән фәһемле фекерҙәрҙең күплегенә хайран ҡалаһың. Ә үҙенең тыуған төйәгенә - Баймаҡ еренә, уңың халҡына, айырым кешеләренә шағирҙың туғандарса мөнәсәбәте күп һанлы әҫәрҙәрендә асыҡ кәүҙәләнә. Ҡайнар йөрәкле, тапҡыр һүҙле, үткер ҡәләмле әҙип үҙенең оло таланты, милли рухы, ҙур эшмәкәрлеге менән юғары дәрәжәле ырыуҙаш булыуы менән бер рәттән, яҡташтарына ябай, кешелекле һәм кеселекле иптәш тә, дуҫ та, таяныс та ул. Бәлки, тап бына ошо сифаттары уны беҙгә нығыраҡ яҡынайталыр.

Әмир Сәйғәфәров,<br>Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе,<br>Башҡортостан республикаһының почетлы крайҙы өйрәнеү

Ифрат күп уның дуҫтары атайсалында. Тыуған төйәгенә ҡайттыммы - ул һәр йортта түрҙән урын алған ҡунаҡ. Сөнки үҙе шулай ҡунаҡсыл. Кемдәр генә килмәй Өфөнөң Зорге урамындағы йортҡа! Берәүҙәр ярҙам һорарға, икенселәре шатлыҡтарын уртаҡлашырға килә. Ҡайғылы хәбәрҙәрҙе лә алып килгән саҡтары була. Барыһын да күтәрә беләләр бында. Бер саҡ Абдулхаҡ ағайым әйткәне булыр: “Тәфтизан, бер күҙ ҙә илай икән ул. Яңыраҡ обкомға барғайным. Өлкән ағайым шундай әрнетеп сығарҙы, үҙем ергә баҡҡанмын, ә бер күҙемдән бөрсөк-бөрсөк йәштәр тәгәрәй. Күҙемдең икенсеһе, Аллаға шөкөр, иламай. Бына шул инде сабый холоҡло, оло йөрәкле Игебай”.

Тәфтизан Ушанов,
Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәр

Үҙ күҙемә үҙем ышанмайым,
Атайсалым шундай үҙгәргән,
Йәншишмәмдең һыуы кибеп бара,
Ҡан тамсыһы тама гөлдәрҙән.

Ватанын сикһеҙ һөйгән, халҡының яҙмышы өсөн әрнеп борсолған әҙип кенә ошолай бәғерҙәргә үтеп инерлек юлдар яҙа алалыр ул. Мин иһә Абдулхаҡ ағайҙы тап шундай кеше итеп беләм дә. Ғүмере буйы тыуған яғы тип янған, күк Ирәндеген юҡһынған, егәрле яҡташтарын һағынған нескә күңелле, оло йәнле кеше итеп..”

Гөллирә Исхакова, шағирә